1.05.18. Оскон.

*Акциялар*

# Китапханала — төн

Ә һеҙ төндә китапханала үткәрергә теләр инегеҙме? Серле, мөғжизәле лә, бер аҙ шомло ла һымаҡ: һүрән генә янған шәмдәлдәр яҡтыһында китап биттәренең шыптырлауы, кәштәләр араһынан быуа-быуа



повесть йә иһә роман геройҙары килеп сығыр төҫлө, берәй мажара булмайынса ҡалмаҫ кеүек ине.

Үҙәк район китапханаһы хеҙмәткәрҙәре ойоштортҡан «Ҡитапханала төн» акцияһы ысынлап та мауыҡтырғыс, йәнле уҙҙы. Быйылғы акция бөйөк рус яҙыусыһы И. С. Тургеневтың 200 йыллыҡ юбилейына арналды. Әҙәби ҡунаҡханала Иван Сергеевичтың китаптарынан күргәҙмә ҡуйылды, китапханасылар шиғырҙарын уҡып ишеттерҙе, алып барыусылар Айгөл Тоҡомбәтова менән Әлиә Ғүмәрова яҙыусының тормош юлы һәм ижады менән таныштырҙы. Таһир Кусимов исемендәге гимназияның 10-сы «б» класы уҡыусылары (класс етәксеһе И. И. Ғәлиәкбәрова) һәм сараға килгән ҡунаҡтар викторина һорауҙарына яуап ҡайтарҙы. Иң әүҙемдәргә Айгөл Афзал ҡыҙы рәхмәт хаттары һәм бүләктәр тапшырҙы.

Сараның икенсе өлөшөндә һәр кем үҙенә оҡшаған шөғөл тапты. Ҡитапханасылар шиғырҙарҙы тасуири уҡыу буйынса флешмоб үткәрҙе, унда балалар ҙа, өлкәндәр ҙә берҙәй ҡыҙыҡһынып ҡатнашты. Район дауаханаһының шәфҡәт туташы Зилә Батталова менән гимназия уҡыусыһы Лиана Сафиуллина флешмоб еңеүселәре булараҡ бүләкләнде. Балалар ижады йортонан Гөлфирә Хәкимова туҡымаларҙан матур сәскәләр эшләү, ә Зилә Батталова гитарала уйнау серҙәрен төшөндөрөү буйынса оҫталыҡ дәрестәре уҙғарҙы. «Ярҙам» үҙәге белгестәре үҙҙәренең ойошмаһы күрһәткән социаль хеҙмәт төрҙәре хаҡында һөйләне, теләгәндәр психолог кәңәштәрен тыңланы. Шағирә Нуриҙә Илһамова китаптар бүләк итте. Ҡитапхана хеҙмәткәрҙәре әҙерләгән сәй өҫтәле янында тәмтом менән һыйланырға мөмкин ине. Акциянан кустәнәскә рухи аҙыҡ — яңы ғына донъя күргән китаптарҙың йөкмәткеһе менән ҡыҫҡаса танышып, оҡшағандарын уҡырға алыусылар ҙа булды.

Лиана САФИУЛЛИНА,
Т. Кусимов исемендәге гимназия уҡыусыһы.